*Рауил БИКБАЕВ,*
*Башкортостандың халык шағиры*

# Шәреҡ йондоҙҙары

Сабый саҡтарҙа ла, үҫеп еткәс тә был йондоҙҙарҙың нуры беҙгә килеп етмәне. Бөйөк шәреҡ шағирҙары хаҡында мин яҙа-йоҙа ғына ишетеп белә инем, әлбиттә. Башҡорт дәүләт университетында уҡыған йылдарымда мин, китапханаларҙа эҙләп табып, Фирҙәүси, Сәғҙи, Хафиз, Низами, Жәми, Ғүмәр Хайям һәм башҡа шәреҡ шағирҙарының русса тәржемә ителгән китаптарын уҡып ҡыуандым. Уйлап ҡараһаң, мәҙрәсәләрҙә белем алған олатайҙарыбыҙ был яҡтан беҙҙән бәхетлерәк булған, атаҡлы ғәрәп һәм фарсы шағирҙары әҫәрҙәрен уларҙың үҙ телдәрендә уҡыған. Ә беҙ, юғары уҡыу йортонда филолог белеме алып сыҡһаҡ та, ғәйәт бай шәреҡ әҙәбиәте хаҡында бер генә лекция ла тыңламаныҡ. Телләгән кеше был донъяға үҙ алдына юл ярырға тейеш ине. Ләкин күпселек уҡыусыларыбыҙ өсөн был һоҡландырғыс шиғриәт иле әле һаман да асылмайынса ҡала. Хәҙер инде русса тәржемәләре лә сыҡмай тиерлек.

Университеттан һуң фарсы һәм ғәрәп шағирҙарының шиғырҙарын башҡортсаға тәржемә итеп, ”Шәреҡ йондоҙҙары” тигән китап әҙерләргә хыялланып йөрөгән саҡтар бар ине. Насип булманы. Күмәкләп тотонғанда, был эште эшләү әле лә һуң түгел.

IX быуат урталарында тыуған Әбелхәсән Рудаки — фарсы-тажик шиғриәтенә нигеҙ һалыусы бөйөк шәхес. Ул Саманид дәүләтенең сәскә атҡан дәүерендә йәшәгән һәм ижад иткән. Бохарала хакимдар мөхитендәге һарай шағиры иҫәпләнһә лә, ғәҙелһеҙлекте фашлап, дөрөҫлөктө яҡлап, бик ҡыйыу һүҙҙәр әйткән. Риүәйәт буйынса, тыумыштан һуҡыр Рудаки музыкант һәм йырсы булараҡ та дан ҡаҙанған.

Рудакиҙың ижади мираҫы тураһында телдән-телгә күсеп килеп еткән ҡайһы бер мәғлүмәттәр хайран ҡалдыра. Был яҡтан уның донъя әҙәбиәтендә тиңдәштәре булһа ла, бик һирәктер. Рудаки бер миллион өс йөҙ мең шиғри юл яҙған. Был — йөҙ том, йөҙ ҡалын шиғыр китабы тигән һүҙ бит! Быға ышаныуы ла ҡыйын. Шуларҙың ике меңгә яҡын юлы ғына һаҡланып ҡалған. Беҙҙең көндәргә килеп еткән шул юлдар буйынса ла уның шиғри генийының көсөн тойорға мөмкин. Юғары ҡатламдар араһында байлыҡта йәшәһә лә, Рудаки халыҡ тормошонан айырылмаған, үҙ халҡының оло мөхәббәтен яулаған. Ҡырҡ йыл буйына Бохара һарайында шағирҙар мәктәбенең остазы булған шөһрәтле Рудаки ғүмеренең аҙағында һөргөнгә ҡыуылған һәм фәҡирлектә үлгән.

Хәҙерге уҡыусыға шул хаҡта лә әйтеү кәрәктер. Күренекле краниолог, профессор М.М.Герасимов етәкселегендә егерменсе быуаттың илленсе йылдарында Рудакиҙың Сәмәрҡәнд зыяратындағы ҡәберенән алынған баш һөйәге тикшерелгән һәм скульптураһы эшләнгән.

Бөйөк аҡыл эйәләренең аҡыллы һүҙҙәре бынан мең йыл элек әйтелһә лә, бөгөн дә йөрәккә үтеп инә. Рудакиҙың шиғырҙарын уҡыған һайын мин шатлыҡ һәм һоҡланыу кисерәм. Шул ҡыуанысымды әле килеп башҡалар менән дә уртаҡлашҡым, Рудаки шиғырҙарын ватандаштарыма башҡортса ишеттергем килде.

*Әбелхәсән* ***РУДАКИ***

Донъя — диңгеҙ. Унда имен йөҙөргә булһаң әгәр,
Ышаныслы карап төҙө яҡшы эштәрҙән мәгәр.

***

Ҡөҙрәтең сикһеҙ бөйөк тип, мин данлайым Алланы:
Ҡолдарын уның маҡтауҙан телем минең талманы.

***

Аҡыллының уй-хәстәре — арттырыу илдә ҡотто,
Ҡыйратыу ҙа талаш булыр бар белгәне алйоттоң.

***

Намыҫым ғына саф ҡалһын, кейем тапланһа ла түҙ.
Ләғнәт һиңә, ҡара йөрәк, ләғнәт һиңә, яман күҙ.

***

Тыңлайһың көн дә кинәнеп татлы ғишыҡ йырҙарын,
Тик бер ҙә ишеткең килмәй иҙелгәндең аһ-зарын.

***

Ҡоҙғон йәшәй ике йөҙ йыл — өлөш хоҙайҙан.
Ҡарлуғастың ғүмере бер йыл — ғәҙеллек ҡайҙа?!

***

Һүҙемде әйткәнгә ҡыҙарған саҡ булды,
Әйтмәйсә ҡалғанға ҡыуанған саҡ булды.

***

Был тормошҡа күпме һорау бирер булдым мин йәштән,
Асылда йәшәйеш тора һорау менән кәңәштән:

”Һаҡлана күр, күҙеңде һис ҡыҙҙырмаһын ят бәхет,
Һинең бәхетте ҡарғайҙыр, бәлки, берәй бәдбәхет”.

Тормош былай тине тағы: ”Асыуыңды бел тыя.
Теле сиселеп барғанды бәлә быҒаулап ҡуя”.

***

Күпме йәшәп тә аҡылға өйрәнмәһә тормоштан,
Уны өйрәтеү файҙаһыҙ, күпме тырыш-тырышма.

***

Ила әйҙә, яҙғы болот! Һиңә рәхмәт яуҙырам.
Һинең түккән күҙ йәшеңдән донъя ниндәй яңыра.

***

Төлкөнән тик тире ҡалған — туҡмай тире иләүсе.
Була шундай язалар ҙа — белһен ғәйбәт һөйләүсе.

***

Йылға ярында платандар, миндалдәр сәскә атҡан,
Әйтерһең дә, каруан-каруан дөйәләр бара атлап.

***

Ҡомһоҙлоҡто, һаранлыҡты ташла, үҙеңдән айыр,
Шул саҡ һиңә бөтә донъя йомарт булып йылмайыр.

***

Мөмкин түгел быға яуап тапмаҡ:
Аҡыллынан ниңә тыуа ахмаҡ?
Атаһының аҡылын, мираҫ итеп,
Алып ҡалмай ахмаҡ хатта саҡ-саҡ.

***

Шиғырымды уҡы, Мәдж*, һиндәй уны кем белһен:
Мин уй булһам, мин йән булһам, һин тәнһең бит, һин —
телһең.

***

Илдең шаһы йомарт булып, шөһрәт алған:
Уҡтарына шау алтындан биҙәк һалған.
Яуҙа үлгән шул алтынға кәфен табыр,
Шул алтынға дарыу алыр яраланған.

***

Күкрәп сәскә ата тағы туғай, ялан.
Иҫә елдәр хуш еҫ бөркөп гөлбаҡсанан.
Ҡайҙа ҡалды дөрләп утын янған көндәр?
Бөгөн ҡыҙыл умырзая дөрләп яна.

***

Сәс-һаҡалды буяным мин ҡараға,
Ҡартайғас был йәшәрмәк тип ҡарама.
Ҡайғырғанда кейенәләр ҡаранан,
Йәшлегемде һағынып, буяндым ҡараға.

***

Эй һылыу ҡыҙ! Йөрәктәрҙе утҡа манып,
Ҡаҡшатаһың һин имамдың хаҡ иманын.

---

*Мәдж — Рудакиҙың шиғырҙарын уҡығандар.

***

Өс күлдәк хаҡында бәйән ҡылына бер ҡиссала,[*]
Өсөһөн дә кейгән икән Йософ ғәләйһиссәләм.

Береһен мәкер ҡанға манған, береһен алдаҡсы йыртҡан,
Өсөнсөһө күҙен асҡан һуҡырайған Яҡуптың.

Тәүгеһенә битем оҡшаш, икенсеһенә — йөрәк,
Йә, хоҙайым, өсөнсөһөн тапһам ине тиҙерәк!

***

Яратҡаныңдың үпкәне тоҙло һыуға бәрәбәр:
Эскән һайын һыуһау-сарсау арта бит иллә мәгәр!

***

Яратмайһың. Һөйөүемде үҙең көтәһең һаман.
Һин дөрөҫлөк таптыраһың, үҙең торғаның — ялған.

***

Ҡоралай ҙа түгелһең бит, ауыма ҡабаһың көҫәп,
Шулай булғас, ҡотолам тип, тыпырсынма, йәнкиҫәк!

***

Ҡой шараптың һин шундайын — тамсыһы тамһа Нилгә,
Йөҙ йыл иҫерек булырға етһен ул крокодилға.
Ул шарапты болан эсһә, булһын дәһшәт арыҫлан,
Ҡалтыранһын бар йыртҡыстар тауышын ишетеп алыҫтан.

## Йомаҡ

Колаҡһыҙ ҙа сос ишетә, үҙе аҡһаҡ — шәп елә,
Күҙһеҙ бар донъяны күрә, телһеҙ ҙә һөйләй белә.
Зифа һындай һығылмалы, йәш тал һымаҡ бөгөлә,
Бер моңая, бер ҡыуана, үткер ҡылыстай телә.

*(Яуабы: кaурый кәләм).*

[*]Йософ пәйғәмбәрҙе бәләкәй сағында ағалары ҡоллоҡҡа һатып ебәрәләр, аталары Яҡупҡа ҡустыларының ҡанлы күлдәген күрһәтеп, уны бүре ашаны тиҙәр; үлеп ғашиҡ Зөләйха ҡоло Йософто ҡосаҡларға иткәндә, егет унан тайшана һәм күлдәге йыртылып китә, ҡатыны иренә был егет мине мәсхәрә итергә теләне тип алдай; Йософ падишаһ булғас, үҙенең күлдәген һуҡырайған атаһына ебәрә һәм Яҡуптың күҙе асыла.